**Мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә телмәр үҫтереү буйынса**
**“Ҡыш - Батшабикә” темаһына дәрес конспекты**

Программа йөкмәткеһе: ҡыш тураһында шиғырҙың йөкмәткеһе менән танышыу; балаларҙың һүҙ байлығын, телмәрен, фекерләү кимәлен үҫтереү, башҡорт халыҡ ижады аша ҡыш билдәләре менән таныштырыу; балаларҙа ҡышҡы тәбиғәткә ҡарата һөйөү, күҙәтеүсәнлек тәрбиәләү.

Йыһазландырыу: “Өлөштәрҙән һүрәтте йый”, “Кемгә нимә кәрәк?” тип аталған дидактик уйындар, ҡыш һүрәте, йомаҡтар менән ике ҡар бөртөгө, “Ҡыш - батшабикә” һүрәте.

**Дәрес барышы**

I. **Ойоштороу моменты**. Артикуляцион гимнастика эшләү.
Тын юлдарына гимнастика (водолаз, шар тултырыу, эҫе сәй, эттәр, сәскәләр, моңло өндәр);
- ауыҙ, ирен, телгә гимнастика (тауышһыҙ көлөү, йылмайыу, энә, көрәк, тәмле варенье, сәғәт, торба, керәндил);
- фонетик зарядкалар (тамаҡты врачҡа күрһәтеү, ҡурсаҡты йоҡлатыу, бүре нисек олой, йылан нисек ыҫылдай, ҡаҙҙар нисек ҡысҡыра, һүҙһеҙ йырлау);
-тиҙәйткестәр:
Һыуыҡ һыу һалҡын була,
Һыуыҡ килһә, һыу туңа.

**II. Төп өлөш**
1.Шиғыр өҫтөндә эш. Назар Нәжми. “Ҡыш”.
Оса күктә, оса күктә
Күбәләкме, ҡармы
Йәй ҙә үтте, көҙ ҙә үтте,
Шундай ваҡыт бармы?
Бар икән, бар икән,
Яуғаны аҡ ҡар икән.
Ҡар икән, ҡар икән,
Шундай ваҡыт бар икән.
- Ниндәй ваҡыт тураһында һүҙ бара? (Ҡыш тураһында)

- Ҡыш айҙарын һанап китегеҙ. (декабрь, ғинуар, февраль)
- Ҡыш ниндәй? (һыуыҡ, ҡарлы, буранлы)
- Беҙ әле ҡышты һүрәтләнек. Ә ҡышты шағирҙар, рәссамдар, композиторҙар нисек һүрәтләй? Күп шағирҙар, рәссамдар, композиторҙар ҡышты уның сихри матурлығы, балҡып торған төҫтәре өсөн яратҡандар. Әйҙәгеҙ беҙ ҙә ҡыш тураһында һөйләшеп алайыҡ!

Ҡыш тураһында шиғыр уҡыу.

Ҡыш –һыуыҡ һәм дә саф һауа.
Ниндәй ҙур шатлыҡ –ҡар яуа!
Ҡыш ул – бейәләй һәм быйма.
Ҡар бәрешеүҙәр -мәрәкә!
Өшөйһөң, ҡайт, тип, һин тыйма
Саңғыла йөрөү кәрәк тә!
Бөтә ер өҫтө аҡтан-аҡ!
Ҡышта бәхетле бала саҡ!

- Ә хәҙер ҡыш тураһында көй тыңлайыҡ. Тик иғтибарлы тыңлағандарға ғына көй үҙенең тылсымлы ҡапҡаларын асыр. Бирелеп тыңлаһағыҙ, бәүелеп-бәүелеп төшкән ҡар бөртөктәре күҙ алдығыҙға килер, ҡарлы-буранлы ел тауышын, ҡарҙың шығырлауын ишетерһегеҙ... (Рус композиторы Петр Чайковскийҙың "Щелкунщик" операһынан өҙөк - "Декабрь", итальян композиторы Антонио Вивальдиҙың "Йыл миҙгелдәре"операһынан өҙөк - "Ҡыш" тыңлау. )

Балалар, Ҡыш-батшабикә беҙгә эштәр алып килгән, әгәр уларҙы эшләй алмаһаҡ, ул беҙҙе туңдырасаҡ.

Дидактик уйын "Өлөштәрҙән һүрәтте йый".

-Һүрәттә ниндәй миҙгел төшөрөлгән? (ҡыш)
-Ни өсөн ҡыш тип уйлайһығыҙ?
-Ҡышын беҙҙә ҡалған ҡоштарҙы нисек атайҙар? (ҡышлаусы)
-Ҡыш миҙгеле көнөн нисек атайҙар? (ҡышҡы көн)
-Был һүҙҙәрҙе иҫтә ҡалдырығыҙ: «ҡыш», «ҡышҡы», «ҡышлаусы» - улар тамырҙаш һүҙҙәр.

«Кемгә нимә кәрәк?» уйынын уйнау.

Клюшка, шайба ... ( хоккейсыға) кәрәк
Коньки ... ( конькиҙа шыуыусыға) кәрәк
Сана... ( санала шыуыусыға ) кәрәк
Саңғы ... ( саңғысыға ) кәрәк

–Балалар, ҡыш көнө һеҙ ниндәй уйындар уйнарға яратаһығыҙ? (санала шыуырға, конькиҙа, саңғыла йөрөргә, ҡар бабай әүәләргә, ҡар бәрешеп уйнарға)

Ял минуты.
а)Аҡ ҡуяндар ултыралар,
Ҡолаҡтарын һелкетеп.
Бына шулай, бына шулай,
Ҡолаҡтарын һелкетеп.
Ҡуяндар өшөй башланы
Бына шулай, бына шулай,
Һикереп алырға кәрәк,
Бына шулай,бына шулай,
Йүгереп алырға кәрәк.

б)Балалар , балалар ҡышҡы урманға баралар.
Тәбиғәтте ҡарайҙар,
Ҡышҡы һыуыҡта өшөгән ҡулдарын йылыталар.
Ҡар бөртөктәрен күҙәтеп, улар кеүек осалар:
Бер, ике, өс, дүрт, биш.
Ҡар бөртөктәрен йыялар, өйгә ҡайтып китәләр.

–Балалар, ҡарағыҙ әле минең ҡулыма ниндәй матур ҡар бөртөктәре килеп ҡундылар. Улар ябай ҡар бөртөктәре түгел, ә йомаҡтар менән.
а) Үҙебеҙ яһайбыҙ уны,
Тик бында булмай кертеп.
Тора байрамдан сыҡҡанды
Ишек төбөндә көтөп. (Ҡар бабай)

б) Ҡара ерҙең өҫтөнә ҡаҙ мамығын кем түккән? Аҡ юрғанын кем теккән? Ап-аҡ ондо кем һипкән? (ҡыш)

в) Ҡотора ла үкерә, бөтөн ерҙе тултыра. (буран)

г) Аяғы юҡ, ҡулы юҡ.,
Үҙе һүрәт төшөрә. (һыуыҡ)

д) Утта янмай, һыуҙа батмай. (боҙ)

е) Осоп китте, йөҙөп китте, ваҡыты еткәс, иреп бөттө. (ҡар)

- Йомаҡтар ниндәй йыл миҙгеленә ҡарай? (Ҡыш)
-Нимәһеҙ ҡыш булмай? (ҡарһыҙ)
- Хәҙер ҡарҙың билдәләрен иҫкә төшөрәйек тә, ҡар тураһында йомаҡ уйлап сығарайыҡ.
-Тотоп ҡарағанда ҡар ниндәй? (һалҡын)
- Нимә кеүек һалҡын? (боҙ)
-Тағы ниндәй? (йомшаҡ)
-Нимә кеүек йомшаҡ? (мамыҡ)
-Ниндәй төҫтә? (аҡ)
-Нимә кеүек? (шәкәр)
- Ә хәҙер ҡар тураһында йомаҡ сығарайыҡ.
Һалҡын, әммә боҙ түгел,
Йомшаҡ – мамыҡ түгел,
Аҡ – шәкәр түгел.
Был нимә?
- Балалар, беҙ һеҙҙең менән ҡыш тураһында йырҙар беләбеҙ. Әйҙәгеҙ, береһен йырлап үтәйек.
«Шыршы ҡупшы кейенгән» йырын йырлау.

**Йомғаҡлау.** Балалар беҙ бөгөн ниндәй миҙгел тураһында һөйләштек? (ҡыш)
Ҡар-батшабикә беҙгә бүләк алып килгән. Нөктәләрҙе яҙылған һандар тәртибендә тоташтырһағыҙ, нимә икәнен белерһегеҙ. Матур итеп буяп та ҡуйығыҙ. (шыршы һүрәте килеп сыға)